**ЗАДАНИЯ**

**II тура дистанционной олимпиады по Башкирскому языку**

**для учащихся 9 - 11 классов**

1. Эмоциональ (субьектив) баһа биреүҙе белдергән исемде табығыҙ:

   Ҡыҙың тиң иткән Алпамышаны

   Үҙ улыңдай итеп күрһәнә,

   Күрһәнә, атаҡайым, күрһәнә!
2. Төшөм килештә килгән һүҙҙе билдәләгеҙ: Урамығыҙҙы уҙайым, йәшел ебәк һуҙайым.
3. Хис-тойғо һәм һиҙемләү ҡылымдарын күрһәтегеҙ: Шаңҡып ҡалғандар яйлап аңына килде, бәғзеләре, киреһенсә сарбайлап, иларға тотондо.
4. Өноҡшатыу һәм ымлыҡ ҡылымдарҙы күрһәтегеҙ: Тимерлектә һабан төҙәтәләр, гөрләп үҫһен өсөн игендәр.
5. **Һуҡҡан** һүҙенә морфологик анализ эшләгеҙ.
6. **Өйрәнмәгән** һүҙенә фонетик анализ.
7. Шарт һөйкәлешендә килгән һүҙҙе табығыҙ: Балалар уҡытһам, ҡайғылы көндәрем тиҙ үтер ине.
8. **Йондоҙҙар ялтырай** һүҙьяһалышын тикшерегеҙ.
9. Бойороҡ һөйкәлешен күрһәтегеҙ: *Хәҙер үк эҙегеҙҙе юғалтығыҙ. Югиһә яҡшылыҡ өмөт итмәгеҙ.*
10. Теләк һөйкәлешен күрһәтегеҙ: *Бөтә донъяны аҫтын-өҫтөн әйләндереп онтағыһы, емергеһе килде.*

11. Ихтималлылыҡ һөкәлешенең беренсе формаһын күрһәтегеҙ: *Иҫән булһа, һеҙҙең һымаҡ ҡайтып килер ине, шаулашып донъя көтөр ине.*

12. Һөйләмдән сифат ҡылымды табығыҙ: *Алғанға алтау ҙа аҙ, биргәнгә бишәү ҙә күп.*

13. Уртаҡ ҡылымды күрһәтегеҙ: *Ҡытайҙар ҙа был ваҡытта сәй һатырға булғандар.*

14. Хәл ҡылымды күрһәтегеҙ: *Мин ашҡынып, ярһып осоп килдем, шашып килдем, янып килдем, мин бит һеҙгә бәхет алып килдем.*

15. Исем ҡылымды күрһәтегеҙ: *Ә минең ярыштарҙы ҡарау ҡайғыһы юҡ.*

*16.* Ҡылымдың мөмкинлек һәм мөмкин түгеллек модаллеген күрһәтегеҙ: *Соҡоп булмай илдең күҙен,*

*Киҫеп булмай илдең телен.*

17. Һөйләмдән рәүеште табығыҙ: *Рәсәй ғәскәрҙәре ары бирелде, бире һуғылды.*

18. Кире ҡағыуҙы һәм инҡар итеү модаль һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ: *Ҡабат шул ситкә сығып йөрөүем юҡ.*

19. Модаль киҫәксәләрҙе күрһәтегеҙ: *Йәшәү өсөн, бәхет һәм шатлыҡ өсөн тыуғанһың да баһа һин, Бураншa.*

**20.** Теркәүестәрҙе күрһәтегеҙ: *Уны белмәгән кеше юҡ, һәм ул үҙе лә ауылдың ҡартын-йәшен, хатта бала-сағаһын исемләп белә.*